# Төçтәр



















Һүрәттәге предметтар ниндәй төҫтә? Көрән төҫлө тағы ниндәй предметтар атай алаһығыҙ?










Ҡамыштар ҙа баштарын
Көрән буяуға манған,
Айыуҙар ҙа үҙенә
Минең төҫөмдө алған!

Һүрәттәге предметтар ниндәй төҫтә? Аҡ төҫлө тағы ниндәй предметтар атай алаһығыҙ?



Ҡайындар ҙа туҙҙарын
Ап-аҡ буяуға манған,
Аҡҡоштар ҙа үҙенә
Минең төҫөмдө алған!

Һүрәттәге предметтар ниндәй төҫтә? Зәңгәр төҫлө тағы ниндәй предметтар атай алаһығыҙ?



Тәбиғәт тә тауҙарын
Зәңгәр буяуға manған,
Хатта күк тә үҙенә
Минең төҫөмдө алған!

һүрәттәге предметтар ниндәй төҫтә? Йәшел төҫлө тағы ниндәй предметтар атай алаһығыҙ?





Ҡарағайҙар ылыҫын
Йәшел буяуға манған,
Шыршылар ҙа үҙенә
Минең төҫөмдө алған!



Һүрәттәге предметтар ниндәй төҫтә? Һары төҫлө тағы ниндәй предметтар атай алаһығыҙ?



Томбойоҡ та таждарын
Һары буяуға манған,
Алтын да бит үҙенә
Минең төҫөмдө алған!

һүрәттәге предметтар ниндәй төҫтә? Ҡуйы һары төҫтәге тағы ниндәй предметтар атай алаһығыҙ?



Төлкөбикә лә тунын
Ҡуйы һарыға манған.
Әфлисун да үҙенә
Минең төҫөмдө алған!

Һүрәттәге предметтар ниндәй төҫтә? Ҡыҙыл төҫлө тағы ниндәй предметтар атай алаһығыҙ?



Әтәстәр ҙә кикреген
Ҡыҙыл буяуға манған,
Хатта ут та үҙенә
Минең төҫөмдө алған!

Һүрәттәге предметтар ниндәй төҫтә? Һоро төҫле тағы ниндәй предметтар атай алаһығыҙ? Ҡара төҫтәге предметтар әйтегеҙ.



Бүреләр ҙә тундарын
Һоро буяуға манған,
Сысҡандар ҙа үҙенә
Минең төҫөмдө алған!



Ҡарлуғас та ҡауырыйын
Ҡара буяуға манған,
Хатта ер ҙә үҙенә
Минең төҫөмдө алған!